МУНИЦИПАЛЬНОЕ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ БЮДЖЕТНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ СРЕДНЯЯ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНАЯ ШКОЛА С.БИЛЯЛОВО МР БАЙМАКСКИЙ РАЙОН РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
| --- | --- | --- |
| На заседании ШМО учителей | Зам.директора по УВР | Директор школы |
| ______/ З.Ф. Гумерова/ | ______/ М.М. Мавлютова/ | ______/ А.И. Аминев/ |
| Протокол №1 от «14» августа 2023 г. | «18» августа 2023 г. | приказ №62 от «21» августа 2023 г. |

# Рабочая программа
# по учебному предмету «Родная (башкирская) литература»
# для 5 класса

Составлена на основе Примерной образовательной программы по предмету “Башкирская литература” для 5-11 классов общеобразовательных организаций с родным (башкирским) языком обучения (авт.-сост.: М.Б. Юлмухаметов, Г.М. Набиуллина).

Программу составил учитель башкирского языка и литературы Гумерова З.Ф.

Билялово – 2023 г.

## АҢЛАТМАЛЫ ЯҘЫУ

Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған төп дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-9-сы кластары өсөн «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» предметы буйынса белем биреү өлгө эш программаһы (артабан – Программа) уҡыу предметының һәр йыл буйынса йөкмәткеһен, уҡыусыларҙы Туған (башҡорт) әҙәбиәтеуҡыу предметы саралары менән уҡытыу, тәрбиәләү һәм үҫтереү буйынса төп методик стратегияларҙы билдәләй».

Программаның норматив хоҡуҡи базаһы:

-Рәсәй Федерацияһы Конституцияһы;

-«Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында» 2012 йылдың 29 декабрендәге №273-ФЗ Федераль закон (үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр менән);

-«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» 1991 йылдың 25 октябрендәге №1807-1 Россия Федерацияһызаконы закон (үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр менән);

-Төп дөйөм белем биреүҙең федераль дәүләт белем биреү стандарты (Рәсәй Федерацияһы Мәғариф министрлығының 2021 йылдың 31 майындағы №287 бойороғоменән раҫланған);

-Төп дөйөм белем биреүҙең төп өлгө программаһы (дөйөм белем биреү буйынса федераль уҡытыу-методик берләшмәһе ҡарары менән хупланды, 2022 йылдың 18 мартындағы №1/22 протокол);

-Тәрбиә биреүҙең өлгө программаһы (дөйөм белем биреү буйынса федераль уҡытыу-методик берләшмәһе ҡарары менән хупланды, 2022 йылдың 23 июнендәге№1/22 протокол).

Башҡортостан Республикаһы Баймаҡ районы Муниципаль дөйөм белем биреү бюджет ойошмаһы Билал ауылы урта дөйөм белем биреү мәктәбенең уҡыу планына ярашлы тормошка ашырыла.

Программа Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй Федерацияһының башҡа төбәктәрендәбашланғыс дөйөм белем биреү программаларын туған (башҡорт) телдә уҡытыуҙы ғәмәлгә ашырыусы дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн эшләнгән һәм предмет өлкәһе уҡытыу туған телдә алып барылған «Туған тел һәм әҙәбиәт»менән эшләүсе уҡытусыларға методик ярҙам күрһәтеүгә йүнәлтелгән.

Дәреслектәр һәм эш программаларын төҙөүсе авторҙар уҡыу материалының күләмен һәм йөкмәткеһен киңәйтергә, уҡыусыларҙы үҫтерүгә һәм тәрбиәләүгә ярҙам итеүсе эш төрҙәрен тәкдим итергә хоҡуҡлы.

Программатөп дөйөм белеү биреү федераль дәүләт стандарттары һөҙөмтәләре талаптарына ярашлы төҙөлдө (артабан – ФДББС).Унда шулай уҡ дөйөм белем биреүҙең универсаль уҡыу эшмәкәрлеген үҫтереү һәм формалаштырыу программаһының төп идеялары һәм ҡағиҙәләре, башланғыс дөйөм белем биреү өсөн өлгәлә белем биреү программалары менән күсәгилешлек иҫәпкә алына.

Программа нигеҙендә кешенең рухи тормошон, уның әҫәрҙә сағылдырылған эске донъяһын, ә уҡыусының үҙ донъяһы – төп ҡиммәт булараҡ ҡарарға мөмкинлек биреүсе гуманитар педагогика идеялары һәм гуманитар педагогик принциплар ята. Был концепцияла әҙәбиәт дәресе кешенең һығылмалыҡ, вариативлыҡ, диалог ҡора белеүенә хас булған гуманитар фекерләү стиленә һәләтен стимуллаштырыу һәм үҫтереү, ә дөйөм әҙәби белем биреү – уҡыусыларҙы мәҙәниәт ҡаҙаныштарына йәлеп итеү, уларҙы ижади эшмәкәрлеккә индереү өсөн шарттар тыуҙырыу сараһы булараҡ ҡарала.

Программа эш программаларын төҙөү өсөн йүнәлеш булып тора: ул уҡыу курсының инвариант (мәжбүри) өлөшөн билдәләй, унан ситтә белем биреүҙең йөкмәткеһенең вариатив өлөшөн тәшкил итеүсе авторлыҡ һайлау мөмкинлеге ҡала. Эш программалары һәм дәреслектәрҙең авторҙары уҡыу материалын структуралаштырыуға, уны өйрәнеүҙең эҙмә-эҙлеклелеген билдәләүгә, йөкмәткене киңәйтеүгә, шулай уҡ белем,

оҫталык һәм эшмәкәрлек алымдарын формалаштырыу, уҡыусыларҙы үҫтереү, тәрбиәләү һәм социаллләштереү юлдарын билдәләүгә үҙ ҡараштарын тәҡдим итә алалар.

Программала башланғыс дөйөм белем биреү программаларында тәҡдим ителгән барлыҡ төп эшмәкәрлек төрҙәрен үҫтереү ҡаралған. Әммә Программаның йөктәмкеһе, беренсенән, урта белем биреү системаһының предмет йөкмәткеһенә, икенсенән, уҡыусыларҙың психологик һәм йәш үҙенсәлекләренә бәйле.

Программа башҡорт телен белеүсе уҡыусылар өсөн эшләнгән.

Программаның йөктәмкеһе системалы-эшмәкәрлек алымына ярашлы төҙөлгән һәм төп дөйөм белем биреү программаһының «Туған тел һәм туған әҙәбиәт» предметы өлкәһе өлөшөнә ФДББС(федераль дәүләт белем биреү стандарттары)ҡуйған талаптар һөҙөмтәләренә ирешеүгә йүнәлдерелгән.

Уҡыу планында **предметтың урыны**: аҙнаһына 2 сәғәт, уҡыу йылына– 68 сәғәт **.**

## Туған (башҡорт) әҙәбиәте предметына дөйөм характеристика

Образлы һүҙ сәнғәте булараҡ әҙәбиәт – тормошто танып белеүҙең үҙенсәлекле алымы, донъяның фәнни картинаһынан үҙенең эмоциональ йоғонтһоноң юғары дәрәжәһе, метафориклығы, күп мәғәнәле булыуы, тамамланмағанлығы, ҡабул итеүсенең актив ижадын күҙ алдында тотоуы кеүек мөһим айырмаларға эйә сәнғәт моделе.

Әҙәбиәт Рәсәй мәктәптәрендә төп гуманитар уҡыу фәне булараҡ, һәр яҡтан үҫешкән, гармоник шәхесте формалаштырыуға, гражданин һәм патриотты тәрбиәләүгә булышлыҡ итә. Мәҙәниәттең гуманистик ҡиммәтттәренә мөрәжәғәт итеү һәм ижади һәләтлеген үҫтереү – эмоциональ бай һәм интеллектуаль үҫешкән, үҙенә конструктив һәм шул уҡ ваҡытта тирә-йүндәге донъяға тәнҡит күҙлегенәнән ҡарарға өйрәнгән шәхес тәрбиәләүҙең кәрәкле шарты.

Әҙәбиәт дәрестәрендә уҡыусының һүҙ сәнғәте әҫәрҙәре менән танышыуы – ул ысын художество ҡиммәтәре менән генә танышыу факты түгел, ә аралашыу (коммуникация), яҙыусылар менән диалог тәжрибәһе лә. Илебеҙ халыҡтарының һүҙ сәнғәте әҫәрҙәре менән танышыу уҡыусыларҙың аңында художестволы мәҙәниәттең байлығы һәм күп төрлөлөгө, күп милләтле Рәсәйҙең рухи һәм әхлаҡ потенциалы тураһында ҡараштарын киңәйтә.

Һүҙҙәр, тел билдәләре менән әҙәби әҫәрҙә һүрәтләнгән тормоштоң художестволы картинаһы тойғолар (эмоция) нигеҙендә генә түгел, ә интеллектуаль аңлап ҡабул ителә (рациональ). Әҙәбиәтте юҡҡа ғына фәлсәфә, психология менән сағыштырмайҙар, уны «художестволы тикшеренеү», «кешене өйрәнеү фәне», «тормош дәреслеге» тип атайҙар.

Уҡыу предметының йөкмәткеһе дәрестән тыш эшмәкәрлектә лә (конференция, байрам сараһы, квест һ.б.) тормошҡа ашырылырға мөмкин.

## «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» уҡыу предметын өйрәнеүҙең маҡсаты һәм бурыстары

«Туған (башҡорт) әҙәбиәте» предметын өйрәнеүҙең **маҡсаты** – башҡорттарҙың мәҙәни-тел өлкәһен аңлаған, рухи яҡтан үҫешкән шәхес тәрбиәләү, уҡыусыны үҙ халҡының әҙәби мираҫына йәлеп итеү, уның сәнғәт текстарын ҡабул итеүгә, аңлауа һәм объектив баһаларға булғанһәләтен үҫтереү, база коммуникатив күнекмәләрен камиллаштырыу.

«Туған (башҡорт) әҙәбиәте» предметын өйрәнеүҙең **бурыстары**:

-башҡорт халҡының төп мәҙәни ҡиммәттәренең береһе һәм тормышто танып белеүҙең ысулы булараҡ художестволы әҙәбиәткә мөнәсәбәт формалаштырыу;

-ҡабул итә белеүҙе үҫтереү, анализлау, тәнҡитле баһалау һәм уҡығанды интерпретациялау, әҙәби әҫәрҙә сағылдырылған художестволы тормош картинаһын эмоциональ һәм интеллектуаль кимәлдә аңлау;

-этаплап, эҙмә-эҙлекле аңлап уҡыу, уҡығанды аңлатыу,анализлау һәм тексты интерпретациялай белеү һәләтен формалаштырыу;

-һүҙлек запасын байытыу, уҡыусыларҙа тел һәм яҙма һөйләү нормалары, һөйләм этикеты ҡағиҙәләре нигеҙендә туған телде белеү культураһын уның функциональ мөмкинлекләренең бар тулылығында үҫтереү;

-әҫәрҙәрҙең төр һәм жанр, сюжет-композицион һәм тел үҙенсәлектәрен, һүрәтләү урынын, ваҡытын һәм ысулдарын билдәләү;

-нәфис текста яҙылғандың мәғәнәһенә төшөнөүҙең яҡынса алгоритмдарын үҙләштереү, уҡылғанға ҡарата үҙ баһаларын һәм фекерҙәрен күрһәтеү;

-үҙ позицияңды белдереү мәҙәниәтен, үҙ фекереңде дәлилләү һәм уны төрлө жанрҙарҙың телдән һәм яҙма әйтелешендә формалаштырыу һәләтен тәрбиәләү, ижади, аналитик һәм интерпретациялау характерындағы асыҡтелмәр төҙөү;

-«сит» позицияны аңлау культураһын тәрбиәләү, башҡа кешеләр ҡиммәттәренә, башҡа дәүерҙәр һәм халыҡтар мәҙәниәтенә хөрмәт менән ҡарау;

-үҙ-үҙеңде камиллаштырыу өсөн әҙәбиәт уҡыуҙың һәм өйрәнеүҙең мөһимлеген аңлау, ял ваҡытында уҡыу өсөн әҫәрҙәрҙе аңлы рәүештә һайлауға ынтылыш формалаштырыу;

-шәхестең уңышлы социализацияһы һәм үҙ-үҙен тормошҡа ашырыу өсөн кәрәк булған уҡыусыларҙың интеллектуаль ижади һәләттәрен үҫтереү;

-мөһим дөйөм белем биреү күнекмәләрен һәм универсаль уҡыу эшмәкәрлеген үҙләштереү (эшмәкәрлек маҡсаттарын формалаштырыу, уны планлаштырырыу, библиографик эҙләнеүҙе тормошҡа ашырырыу, кәрәкле мәғлүмәтте төрлө сығанаҡтарҙан шул иҫәптән Интернеттан һ.б. табыу һәм эшкәртеү).

**Уҡыу предметының йөкмәткеһе. 5 синыф (68 сәғәт)**

**М.Ғафури. “Нурлы мәктәп”, Р.Ниғмәти. “Хәйерле юл һеҙгә!” 2с.**

Әҫәрҙә уҡыусыларҙың йәйге каникулын, уҡыуҙың тәүге көнөн тасуирлау. Уҡытыусы образы. Әҫәр теленең образлылығы. Тасуири уҡыу күнекмәләрен үҫтереү.

**Р.Байбулатов. Ағас һәйкәл.1с.**

Әҫәрҙә малайҙар дуҫлығы, бер-береһенә мөнәсәбәтенең с ағылышы.

**М.Кәрим.”Уҡытыусыма”, Н.Нәжми. “Беренсе дәрес” 2с.**

**Л.Яҡшыбаева “Бәхетең үҙең менән” 1с.**

Әҫәрҙең темаһын һәм идея йөкмәткеһен билдәләү. Текст буйынса һорауҙар төҙөү һәм уларға яуап биреү. Уҡытыусы образына характеристика.

**А.Карнай. “Урманда” 2 с.**

Хикәйәлә көҙгө тәбиғәтте тасуирлау. Йөкмәткеһенең аллегорик характерҙа булыуы. Төп образдар. Уҡыусыларҙың һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү маҡсатында тәбиғәтте тасуирларға өйрәтеү.

Әҙәбиәт теорияһы. Тасуирлау тураһында төшөнсә.
**Ғ.Рамазанов. “Ураҡ өҫтө”. 1с.**
**Ф.Аҡбулатова. “Атай икмәге” 2с.**
Игенсе хеҙмәтен данлау, юғары баһалау. Игенсе образы.
**Ҡ.Аралбай. “Башҡорт теле”, Б.Бикбай. “Туған тел”, “Рус теле”, Р.Ғарипов. “Туған тел” 4 с.**
Туған тел һәм рус теленең халыҡ тормошонда тотҡан әһәмиәтен, байлығын данлау, телгә хөрмәт тәрбиәләү, шиғырҙың тел байлығын күҙәтеү.
**Х.Тапаҡов.”Бибинур “улусәй” 1с.**
Хәҙерге ҡала тормошо, быуындар бәйләнеше, туған тел, ғөрөф-ғәҙәттәр.
**М.Ғафури. “Балалар һәм китап” 1с.**
**Д.Бүләков. “Яралы китап” 1с.**
Хикәйәлә Бөйөк Ватан һуғышы осоронда халыҡтың берҙәмлеген, илдең азатлығын һаҡлау өсөн берҙәм күтәрелеүен һүрәтләү. Уҡыусыларҙың һуғышта ҡатнашыусыларҙы хөрмәтләүе.
**Я.Ҡолмой “Ҡыҙыҡлы китап”,Н.Иҙелбай. “Иң яҡын дуҫ” 1с.**
Бала ғүмерендә китаптың роле, әһәмиәте.
**Башҡорт халыҡ ижады.1 с.**
Үтелгәнде ҡабатлау. Фольклор һәм яҙма әҙәбиәт.
**Әкиәттәр. 4 сәғәт**
Әкиәттәрҙең художестволы үҙенсәлектәре. Тормош-көнкүреш әкиәттәре. Халыҡтың хеҙмәтте юғары баһалауы. Хеҙмәткә өндәү идеяһы.
**Йомаҡтар. 1 сәғәт**
Халыҡ ижадының бер төрө булыуы яғынан йомаҡтар. Уларҙа халыҡтың тапҡыр аҡылы, зирәклеге, ижади фантазияһының сағылыуы. Боронғо һәм совет осоро йомаҡтары.
Әҙәбиәт теорияһы. Йомаҡтар тураһында төшөнсә.
**Мәҡәлдәр. 1сәғәт**
Халыҡтың тапҡыр аҡылын, зирәклеген сағылдырыусы ҡыҫҡа теҙмә әҫәр. Мәҡәлдәрҙең сағылышы. Тематик төрлөлөгө. Мәҡәлдәрҙең көсө, теле. Уларҙа образлылыҡ, ритмлылыҡ.
Әҙәбиәт теорияһы. Мәҡәл тураһында төшөнсә.
**Башҡорт халыҡ йырҙары. 1 сәғәт**
Башҡорт фольклорында йыр жанры.Оҙон һәм ҡыҫҡа көйлө йырҙар. Таҡмаҡтар.
**С.Юлаев. “Ҡайтып киләм”, “Яуҙа яраланғас”, “Йырҙарҙан...” 2 сәғәт**
Әҫәрҙәренең тематикаһы һәм идея йүнәлеше..Тыуғантәбиғәткә һөйөү, азатлыҡ өсөн көрәш, батырлыҡ темаһы. Поэтик үҙенсәлектәре.
**Ғ.Усман. “Егет булһаң”. С.Якшығолов. “Дим буйында яҙғы таң”, Я.Юмаев. “Шәкерт” 2с.**
**Н.Нәжми. “Беренсе ҡар”,Г.Юнысова. “Ҡотло булһын Яңы йыл!” 1с.**
**С.Сурина. “Ҡышты ҡаршылағанда”, Х.Назар. “Яуа ҡарҙар” 2с.**
**Р.Ғарипов. “Башҡортостан”, И.Кинйәбулатов. “Дуҫлыҡ төйәге” 2с.**

**М.Кәрим. 4с.** Әҫәрҙәрендә балалар тормошон, улар араһында дуҫлыҡ тойғоһон һүрәтләү, балаларҙа хайуандарға ҡарата иғтибар, һөйөү тәрбиәләү.
**Р.Шәкүр. “Урал батыр иле – сал Урал”, Р.Ниғмәти. “Ҡыҙымдың һорауҙарына яуаптар” 2с.**
Әҫәрҙең йөкмәткеһе. Идея мәғәнәһе. Төп образдар.
Әҙәбиәт теорияһы. Йәнләндереү.
**А.Йәғәфәрова “Урал иле” 1с.**
**К.Кинйәбулатова.”Әсә күңеле”, Х.Назар. “Таҡта сәй” 1с.**
**Ғ.Вәлиев. “Әсәйем фатихаһы” 1с.**
**Р.Назаров. “Яҙ башы”, Ш.Бикҡол. “Яҙғы уйҙар” 1с.**
**Д.Бүләков. “Яҙғы ташҡын менән килгән бәхет” 1с.**
**Й.Мостафин. “Ыласын” 1с.**
**Р.Ниғмәти. “Еңеүселәргә дан”, М.Кәрим. “Билдәһеҙ һалдат” 1с.**
**Т.Ғиниәтуллин. “Миҙал” 1с.**
Һуғыш ветеранына булған иғтибар, ветерандарҙың иғтибарға нисек мохтаж булыуын күрһәтеү.
**Р.Ғарипов. “Һабантурғай”, А.Карнай. “Турғай” 1с.**
Тыуған ерҙе һағыныу. Уның тәбиғәтен маҡтау идеяһы. Тәбиғәтте тасуирлау.
**З.Хисмәтуллин.”Урман ҡунағы” 1с.**
Әҫәрҙә яҙғы урман, тәбиғәтте, йәнлектәрҙе һүрәтләү. Олатай һәм уның ейәненең тәбиғәткә мөнәсәбәте.
**С.Агиш.”Турыкай”. Т.Йосопов.”Ерән ҡашҡа” 1с.**
Хикәйә һәм шиғырҙың идея йөкмәткеһе, образдары, художестволы үҙенсәлектәре.
**К.Кинйәбулатова.”Барыһы тыуған еремдә”, Ф.Иҫәнғолов.”Хәмит күпере” 2с.**
Әҫәрҙең йөкмәткеһе, идея мәғәнәһе, образдары.
Әҙәбиәт теорияһы. Характеристика тураһында төшөнсә.
**А.Игебаев. “Һыу буйында балыҡсы”,М.Әбсәләмов. “Йомағужа тирәктәре” 1с.**
**М.Йәлил. “Йырҙарым”, Дәрдмәнд. “Нурый менән Зәйнәб”, “Бер хазина”, С.Моҡанов. “Минең республикам” 2с.**

**Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар.**

**Уҡыусылар түбәндәгеләрҙе белергә тейеш:**
1.Өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең исемен, авторын белеү.
2. Өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең төп темаһын, композицион үҙенсәлектәрен.
3.Өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең ваҡиғаһын(сюжетын) һәм геройҙарын(геройҙар һәм ваҡиғаларҙың үҙ – ара бәйләнешен).
4.Өйрәнелгән әҫәрҙең эпизодтарын айырып күрһәтә белеү.
5. Эпик, лирик, һәм драматик әҫәрҙәрҙе айыра белеү.
6. Программа тарафынан ятлау өсөн тәҡдим ителгән әҫәрҙәрҙең текстары.
7. Уҡыу өсөн үҙ аллы әҙәбиәт һайлап ала белеү.

8. Текст төҙөп яҙа белеү.
9. Әҙәби текстарҙың йөкмәткеһен аңлап, геройҙарҙың эшенә, ҡылығына әхлаҡи баһа биреү.

**Уҡыусылар түбәндәге күнекмәләргә эйә булырға тейештәр:**
1.Яҙыусы һүрәтләгән художестволы картиналарҙы уй менән күҙ алдына баҫтырыу.
2.Художестволы әҫәрҙәрҙе , фәнни һәм публицистика әҫәрҙәрҙән айыра белеү.
34.Контекст эсендә һүрәтләү сараларының идея-художество урынын билдәләү.
5.Уҡытыусы ҡуйған проблемалы һорау ярҙамында геройға характеристика биреү.
6. Художестволы әҫәрҙәрҙе тасуири уҡыу.
7. Эпик әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен тулы йәки ҡыҫҡартып һөйләп биреү.
8. Һорауҙарға тулы яуап биреү.
9. Әҫәр геройҙарына характеристика биреү.
10. Эпик әҫәргә йәки уның өҙөгөнә план төҙөү.
11. Өйрәнелгән әҫәр буйынса инша яҙыу.
12. Өҫтәлмә мәғлүмәт алыу өсөн мәғлүмәт сығанаҡтары менән файҙалана белеү

**Уҡыу-уҡытыу – методик һәм мәғлүмәти-ресурс тәьмин итеү**

1. Аслаев Т. Х., Атнагулова С.В. Сюжетные картинки для развития речи. Уфа: Книга,1996.
2. Аудио-видео пособия по башкирской литературе. Уфа,2005.
3. Башҡорт теле, башҡорт әҙәбиәте. Электрон дәреслектәр.7-9,10-11,педколледждар өсөн.
4. Габитова З.М., Тулумбаев Х.А.Электронный учебник. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте.ru. Уфа, 2006.
5. Башҡорт теле (5-9) һәм әҙәбиәтенән 5-11) тест һорауҙары. И.Ә. Шарапов. Өфө, 2012.
6. Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен заманса уҡытыу. Уҡытыусылар өсөн ҡулланма. М.И. Баһаутдинова, Г.Н. Йәғәфәрова. – Өфө: Китап, 2012.
7. Башҡорт теле һәм туған әҙәбиәт дәрестәрен үҙ-ара бәйләнештә уҡытыу. М.Б.Юлмөхәмәтов, Өфө, 2012.
8. Башҡорт теле, башҡорт әҙәбиәте. Электрон дәреслектәр. 7-9, 10-11, педколледждар өсөн.
9. Лирик әҫәрҙәрҙе өйрәнеү. Б.Б. Ғафаров. Өфө: Китап, 2012.
10. Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы. Б.Б.Ғафаров. Өфө: Китап, 2012.
11. Башкирско-русский словарь пословиц и поговорок. Уфа: Книга, 1994.
12. Скороговорки, чистоговорки, считалочки. Составители: Исянгулова А.Ф., Давлеткулова Г.Ш. Уфа: Рабочая династия, 2008.
13. Журналы: «Учитель Башҡортостана», «Акбузат», «Аманат».
14. Упражнения для физминуток. Методические пособия. Составители: Исянгулова Ә.Ф., Давлеткулова Г.Ш. Уфа: Рабочая династия, 2008.
15. Русско-башкирский учебный словарь. Саяхова Л.Г., Ураксин З.Г. Уфа: Китап, 2001.

16. 8-9 синыфтар өсөн “Әсә теле” дәреслегенә методик күрһәтмәләр. Өфө: Китап, 2006.
17. Исҡужина Ф.С., Вәлиева Г.Д. Башҡорт телендә текст теорияһы һәм методикаһы.Өфө: Китап, 2011.
18. Псңчин В.Ш. Телдең күркәмлек саралары. Өфө: Китап, 2003.
19. Әхмәтйәнов К. Әҙәбиәт теорияһы. 3-сө баҫма. Өфө: Китап, 2004.
20. Баһауетдинова М.И. Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен заманса уҡытыу / Уҡытыусылар өсөн ҡулланма. Өфө: Китап, 2009.
21. Шарапов И.Ә. Башҡорт телендә тышыш билдәләре. Өфө: Китап, 2007.
22. Агишев И.М., Биишев Ә.Г. Башҡорт теленең һүҙлеге: 2 томда, Мәскәү, 1993.
23. Ураҡсин З.Ғ. Урыҫса-башҡортса һүҙлек: -2 томда, Өфө, Китап, 2005.
24. Ураҡсин З.Ғ. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең аңлатмалы һүҙлеге: Өфө, 2004.
25. Ураҡсин З.Ғ. Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге: Өфө, 2006.
26. Әхтәмов М.Х. Грамматика һүҙлеге: Өфө, 2007.
27. Әхтәмов М.Х. Антонимдар: Өфө, 2009.
28. Әхтәмов М.Х. Синонимдар һүҙлеге: Өфө, 2006.
29. Әхмәтов М.Х. Омонимдар (аҙаш һүҙҙәр) һүҙлеге. Өфө: Китап, 2005.
30. Ураҡсин З.Ғ.Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге. Яңыртылған, 2-се баҫма. Өфө: Китап, 2006.

**Әҙәби белем биреү кимәлен диагностикалау, ағымдағы һәм йомғаҡлау контроле**

Уҡыу йылы башында уҡыусылар төркөмөнөң һәм индивидуаль әҙәби үҫеш кимәлен диагностикалау һәм уның артабанғы динамикаһын асыҡлау.

Тасуири уҡыу күнекмәләрен үҙләштереүҙе тикшереү (шул иҫәптән яттан һөйләү), ролдәр буйынса яттан һөйләү, тексты сәхнәләштереү, художестволы әҙәби әҫәрҙең башҡарыу интерпретацияһы элементтарын үҫтереү.

Һөйләшеүҙең монологик телмәр күнекмәләрен асыҡлау һәм әҫәрҙең сюжетын, геройҙарҙың һәм персонаждарҙың характерҙарын аңлау сараһы буларак һөйләүҙең төрлө формалары.

Яҙма телмәр мәҙәниәте кимәлен диагностикалау һәм әҙәби әҫәр йөкмәткеһенең төп аспекттарын аңлау формаһы буларак әҙәби йәки әхлаҡи-этик проблема буйынса яҙма фекер. Әҙәби һәм публицистик темаларға иншалар.

Уҡыусыларҙың проект эшмәкәрлегенә етәкселек итеү буйынса дәрес-консультациялар. Зачеттар, семинарҙар, коллоквиумдар, әҙәби белем биреү сифатын контроллек итеүҙең башҡа формалары